**Демонстрационная контрольная работа по родному (башкирскому) языку для 7 класса**

**Аңлатма һүҙ.**
Башҡорт теле буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен баһалауҙың төп критерийҙары.
Контроль диктанттарҙы баһалау.

Уҡытыусы башта тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй. Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим ителә. Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас та, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш. Диктанҡа билдә ҡуйғанда хаталарҙың характерына иғтибар ителә.Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупа: булмағандары,йәғни грамоталыҡты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Түбәндәге хаталар тупаҫ булмағанға инә: ҡағиҙәнең иҫкәртмәһенә ҡараған хаталар, бәйләү юлы менән яһаған яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышында хаталар,бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу,үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә ялғауҙар яҙылышында хаталар. Диктант бер генә билдәменән баһалана.“5” – тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә, “4”-4 орфографик, 3 пунктуацион,йә 1 орфографик, 6 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа,5 орфографик хатаһы булған эшкәлә“4”ҡуйырға мөмкин.“3”–6 орфографик,6 пунктуацион,йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктацион хаталы эшкәлә“3”ҡуйыла. “2”- 9 орфографик,9 пунктуацион йә 8 орфографик, 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла.. Хатаһаны15 орфографик хатанан да артып китһә “1” билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Контроль диктант:

| | |
|---|---|
| “5” | 1 орфографик,<br>2 пунктуацион |
| “4” | 1-2 орфографик,<br>2 -3 пунктуацион хата |
| “3” | 3-4 орфографик,<br>4-5 пунктуацион хата |
| “ 2” | 5 орфографик |

| | |
|---|---|
| | 4-6 пунктуацион хата |

**Һандуғас тауышы**

Беҙҙең өй артында муйыл ағастары бар. Ағайым уларҙы үҙе бәләкәй сағында ултыртҡан. Хәҙер улар ҙурайғандар,яҙ һайын ап-аҡ сәскә аталар.Көҙ көнө ҡап-ҡара емеш бирәләр.Мине **муйылдың** сәскәһе лә,емеше лә ҡыҙыҡһындырмай,ә иртә таңда уның ботаҡтарына ҡунып һайраған **һандуғастар** ҡыҙыҡһындыра,күңелде үҙенә тарта.

Һеҙҙең һандуғас тауышын ишеткәнегеҙ бармы? Ниндәй өҙөп һайрай ул! Ниндәй матур сутылдай! Кистән башлап таңға тиклем туҡтамай һайрай. Мин оҙаҡ-оҙаҡ уларҙы тыңлайым. Ҡайһы саҡта юрамал ҡурҡытҡан булам, ләкин улар минән ҡурҡмайҙар. Аҙ ғына туҡтап торған булалар ҙа икенсе ботаҡҡа күсәләр һәм тағы ла дәртләнеберәк һайрай башлайҙар.

**Функциональ грамоталыҡ буйынса эш төрҙәре:**

1. Өндәү һәм һорау һөйләмдәргә берәр миҫал табырға
2. Билдәләнгән һүҙҙәрҙең тамырын,ялғауҙарын билдәләргә